Башҡортостан Республикаһы Учалы районы муниципаль районының
муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы
Мәҫкәү ауылы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Советтар Союзы һәм Рәсәй Федерацияһының урындағы һуғыштарында ҡатнашҡан Учалы районы яугирҙарына бағышланған **"Хәтерҙең эҫе нөктәләре"** проект – тикшеренеү эштәре район конкурсына - 2019



# «Ҡаһарманлыҡ урыны – Афғанстан ере»

Темаһы: **Ысын ир аҫылы**

**Фәрүәз Заһиҙуллин**






Башҡарҙы: Мәҫкәү урта мәктәбенең
8-се класс уҡыусыһы
**Заһиҙуллин Фәнүр Фәрит улы**
Етәксеһе:
“Ғаилә ҡиммәттәре” уҡытыусыһы
**Мәүлитова Зилдә Әхмәҙиә ҡыҙы**

# Инеш




Афған һуғышында илебеҙ 14 мең һалдат һәм офицерын юғалтты, илен һаҡларға киткән егеттәрҙең күбеһе ҡайтманы. Беҙҙең һалдаттар Тыуған иле алдындағы бурысын намыҫлы үтәп, Советтар Союзы яугирының намыҫына тап төшөрмәне..

1988 йылдың майында совет ғәскәрҙәрен Афғанстандан сығарыу башлана, ул 1989 йылдың 15 февралендә тамамлана. Афған һуғышы беҙҙең республикабыҙ өсөн дә эҙһеҙ үтмәй. Унда Башҡортостандан туғыҙ мең ярымдан ашыу кеше ҡатнаша. Шуларҙан 343-ө яу яланынан әйләнеп ҡайтмай.

Мәҡәләмдең геройы ла – Афған һуғышы яраһын алған һәм Тыуған иленә артабан да намыҫлы хеҙмәт иткән, **Мәҫкәү ауылының ысын ир аҫылы булған Фәрүәз Заһиҙуллин тураһында.**



**Тикшеренеү эшенең актуаллеге**
Хәрби хеҙмәтен Афған ерҙәрендә, ут эсендә үткәргән меңәрләгән егеттәребеҙҙең береһе

**Тикшеренеү маҡсаты**
Яугир – интернационалистың тормош юлдарын өйрәнеү, артабан уның яҙмышы нисек хәл ителгән, ҡыҙыҡһыныу





**Тикшеренеү мәсьәләһе**
Хәҙерге йәштәрҙең Афған һуғышы тураһында ҡыҙыҡһынмауы һәм һуғышта булған яугирҙәрҙе белмәүе

**Тикшеренеү эшенең гипотезаһы** Әгәр мәктәптә Афғанстан һуғышы яугирҙәре тураһында материалдар йыйып эш алып барһаң, уҡыусылар Афғанстан һуғышы тураһында ҡыҙыҡһынасаҡтар һәм үҙенең яугир – интернационалистары тураһында күп беләсәктәр, яҡташтары менән ғорурланасаҡтар.

# **I бүлек. Тыуған илде һаҡлау – ул профессия**

Мин был тикшеренеү эшемдә Мәсҡәү ауылында йәшәгән һәм уға тоғро хеҙмәт иткән **Фәрүәз Заһиҙуллин** тураһында һөйләмәксемен. Ни өсөн тиерҙәр, бәлки. Сөнки, ул хәрби хеҙмәтен Афған ерҙәрендә, ут эсендә үткәргән меңәрләгән егеттәребеҙҙең береһе. Ул минең иң яҡын бабайым була.



# Фәрүәз Сәлмән улының биографияһы



**Фәрүәз Сәлмән улы Заһиҙуллин,** Учалы районы Мәçкәү ауылында 1967 йылдың 15 майында күп балалы ғаиләлә тыуа. Өләсәйем менән олатайым һәр балаһына яҡты ғүмер һәм яҡшы тәрбиә биреп донъя ҡуялар. Ул ваҡытта ете балаһы ла үҙаллы тормош юлына аяҡ баçҡан булалар. Олатайымдың нәçелен дауам итеп, алты малайы үçә.

# Мәҫкәү ауылы



Олатайымдың алты малайы ла шофер һәм тракторсы эшен һайланылар. Оло улы Сөләймән бабайым ғына ситтә йәшәне. Ул, ҡаты ауырыу сәбәпле, өс балаһын ҡалдырып, бик иртә китте. Ә ҡалған биш малайы ауылында ҡалып, ғаилә ҡороп, тырышып эшләнеләр. Бөгөнгө көндә ауылда ике малайы ғына көн итә. Дүрт малайы ауыр эштәрендә алған ауырыуҙарынан яфаланып донъя ҡуйҙылар. Шуларҙың береһе - Афған еренда хеҙмәт иткән бабайым Фәрүәз Сәлмән улы бөгөн эргәбеҙҙә юҡ.



1967 й. 15 май – 2017 й. 13 апрель



Фәрүәз Сәлмән улы 1974 йылда Мәҫкәү башланғыс мәктәбенә уҡырға бара. Уның тәүге уҡытыусыһы Бүләкова Тәслимә Хәйбулла ҡыҙы була. Кластарында бөтәһе 27 бала уҡый. Ул тәүге уҡытыусыһына яҡшы белем һәм тәрбиә биргәне өсөн гел рәхмәтле була.



1982 йылда, Мәскәү һигеҙ йыллыҡ мәктәбен тамамлап, Науырыҙ урта мәктәбенә уҡырға бара. Фәрүәз Сәлмән улын класташтары тырышлығы, эшсәнлеге һәм ярҙамсыллығы өсөн ихтирам итәләр.

# Наурыҙ урта мәктәбе



Фәрүәз бабайым мәктәптә уҡыған сағында тракторист йә шофер һөнәренә эйә булырға хыяллана. Һәм ул һөнәрзәрзе үзләштерә лә. 1985 йылда Совет Армияһы сафына алына.





# Афғанстанда хеҙмәт иткән йылдары




Үзбәкстанда хәрби хеҙмәт алымдарын дүрт ай буйы үҙләштерә. 1985 йылдың октябрь айында интернациональ бурысын үтәргә Афғанстандың Ҡабул ҡалаһына ебәреләә. Фәрүәз Сәлмән улы, башҡорт егеттәренә хас булғанса, хәрби бурысын намыҫ менән үтәй. Тәүҙә сержант, элемтәсе, һуңынан Р-409 радиореле станцияһы начальнигы бурысы йөкмәтелә уға.

Фәрүәз бабайым ысын һуғышты күрә: дуҫтарының үлеме, цинк табуттары бик оҙаҡ йылдар күҙ алдынан китмәй ҡаңғырта. Көтөлмәгән хәл бабайым хеҙмәт иткән часты ла урап үтмәй – бер төндө дошмандар баҫып инә. Ул бысаҡ яраһын ала һәм Тыуған илгә оҙатыла.



Һауыҡҡандан һуң Фәрүәз Сәлмән улы 1986 йылдың октябрь айында Төркмәнстанға Ашхабад ҡалаһына ебәрелә. Фәрүәз бабайым өҫтөндә был юлы Афғанстанға китәсәк һалдаттарҙы һуғышҡа әҙерләү эше ята.







1987 йылда Фәрүәз Сәлмән улы әрменән **өлкән сержант званиеһы** менән ҡайтып төшә



Ст. сержант







# Фәрүәз Сәлмән улы – герой, наградалары
















ЗА ОТЛИЧИЕ В СЛУЖБЕ
III


УДОСТОВЕРЕНИЕ
награжден(а) медалью
«УЧАСТНИКУ ЛОКАЛЬНЫХ КОНФЛИКТОВ»
УЧАСТНИКУ ЛОКАЛЬНЫХ КОНФЛИКТОВ
Генерал армии


ГРАМОТА
Президиума Верховного Совета СССР
ВОИНУ-ИНТЕРНАЦИОНАЛИСТУ
ПРЕЗИДИУМ ВЕРХОВНОГО СОВЕТА СССР
за мужество и воинскую доблесть, проявленные при выполнении интернационального долга,
Указом от 28 декабря 1988 г. наградил
Грамотой Президиума Верховного Совета СССР
ВОИНУ-ИНТЕРНАЦИОНАЛИСТУ.
Президиума Верховного Совета СССР
Президиума Верховного Совета СССР
28 декабря 1988 г.


СОЮЗ СОВЕТСКИХ СОЦИАЛИСТИЧЕСКИХ РЕСПУБЛИК
ВОИНУ-ИНТЕРНАЦИОНАЛИСТУ
ПРЕЗИДИУМ ВЕРХОВНОГО СОВЕТА СССР
за мужество и воинскую доблесть, проявленные при выполнении интернационального долга,
Указом от 28 декабря 1988 г. наградил
Грамотой Президиума Верховного Совета СССР
ВОИНУ-ИНТЕРНАЦИОНАЛИСТУ.
Председатель Президиума Верховного Совета СССР
Секретарь Президиума Верховного Совета СССР
Москва, Кремль. 28 декабря 1988 г.


УДОСТОВЕРЕНИЕ
Загидуллин
Фарваз
Салманович
Решением Комитета по делам воинов-интернационалистов при Совете Глав Правительств государств-участников СНГ
от «12» апреля 200_ г.
№ 5Б-КС награжден(а) медалью
"ВЕТЕРАН БОЕВЫХ ДЕЙСТВИЙ"
Р.С. Аушев
ЧЕСТЬ СЛАВА ОТВАГА


Загидуллин
Фарваз
Салманович
приказом Министра обороны Российской Федерации
от «17» декабря 2013 г. № 900
награжден (а) юбилейной медалью
«В ПАМЯТЬ 25-ЛЕТИЯ ОКОНЧАНИЯ БОЕВЫХ ДЕЙСТВИЙ В АФГАНИСТАНЕ»
(должность, воинское звание,
инициал имени, фамилия и подпись лица,
вручившего медаль)
М.П.
БАЛТИНСКИЙ
АФГАНИСТАН






Ауылына ҡайтҡас, тыңғыһыҙ һәм эшһеҙ ултыра алмаған егет Силәбе өлкәһе Үрге Урал ҡалаһына водителдәр курсына уҡырға керә. Уҡып бөткәс, 1988 йылда шунда уҡ Үрге Урал ҡалаһында эшкә ҡала.





1989 йылда ул «Байрамғол» совхозына эшкә ҡайта. Ул водитель-машинист эшен үҙләштерә. Тыуған совхозында тыныс хеҙмәт юлы үтә. Үҙенә ҡушылған эште еренә еткереп башҡара ул. 1991 йылда автогаражда водитель булып эшләй.

# II бүлек. Законға хеҙмәт итеү – Тыуған илгә хеҙмәт итеү

Бала сағынан ауылына хеҙмәт итеп үҫкән егеткә законға хеҙмәт итеүе лә бер ни тормай. 1994 йылда Учалы эске эштәр бүлегенә эшкә саҡырыла. Яҡшы эше өсөн 2000 йылда Наурыҙ ауылы советына милицияның **ышаныслы участковый инспекторы** итеп ҡайтарыла.



# Милицияның участка инспекторы – өлкән лейтенант Фәрүәз Заһиҙуллин, наградалары



2001 йылдың көҙөндә Фәрүәз Сәлмән улы Заһиҙуллинды, участка инспекторы булараҡ, өс айға **Чечня Республикаһына** командировкаға ебәрәләр. Яҙмыш тағы берҙе уны Тыуған иле алдында булған бурысын үтәргә ҡуша.












НАГРУДНЫЙ ЗНАК
"ЗА СЛУЖБУ НА КАВКАЗЕ"

УДОСТОВЕРЕНИЕ

ст.прапорщик милиции
Загидуллин
Фарваз Салманович
Приказом Вр.и.о военного
от 31 12 2001 г. № 351
коменданта Урус-Мартановско-го р-на
Награжден нагрудным знаком
"ЗА СЛУЖБУ НА КАВКАЗЕ"
полковник
(звание, подпись, фамилия
лица вручившего знак)
Р.М. Акимов
М.П.


НАГРУДНЫЙ ЗНАК
"УЧАСТНИК БОЕВЫХ ДЕЙСТВИЙ"

УДОСТОВЕРЕНИЕ

ст. прапорщик милиции
Загидуллин
Фарваз Салманович
Приказом командующего
от 01 12 2001 г. № 8454
Награжден нагрудным знаком
"УЧАСТНИК БОЕВЫХ ДЕЙСТВИЙ"
генерал-лейтенант
милиции
(звание, подпись, фамилия
лица вручившего знак)
И.Г. Галимов.
М.П.


НАГРУДНЫЙ ЗНАК
«ЗА ВЕРНОСТЬ ДОЛГУ»

УДОСТОВЕРЕНИЕ

ст.прапорщик милиции
Загидуллин
Фарваз Салманович
Приказом командующего ВОГО и П от МВД РФ по СКР
от 17 12 2001г. № 8964
награжден нагрудным знаком
«ЗА ВЕРНОСТЬ ДОЛГУ»
генерал-лейтенант
милиции
И.Г. Галимов


1923 2008
СЛУЖБА ОДУУП
МВД РФ

УДОСТОВЕРЕНИЕ

капитан милиции
звание
Загидуллин
фамилия
Фарваз Салманович
имя, отчество
НАГРАЖДЕН
НАГРУДНЫМ ЗНАКОМ
М.П.
нач ОВД
должность
подпись
Садыков К
«29» 12 2008 г.



СЛУЖА ЗАКОНУ - СЛУЖУ НАРОДУ

МВД РОССИИ

МИНИСТЕРСТВО ВНУТРЕННИХ ДЕЛ ПО РЕСПУБЛИКЕ БАШКОРТОСТАН

УДОСТОВЕРЕНИЕ

ст. лейтенант милиции
(звание)

Загидуллин
(фамилия)

Фарваз Салманович
(имя, отчество)

В соответствии с приказом МВД по РБ

от «21» 06 2008 г. № 520

вручен памятный юбилейный нагрудный знак

**"450 лет добровольного вхождения Башкирии в состав России"**

Министр внутренних дел по РБ
генерал-лейтенант милиции

М.П. Р.У. Диваев



НАГРУДНЫЙ ЗНАК

"ЛУЧШИЙ УЧАСТКОВЫЙ УПОЛНОМОЧЕННЫЙ МИЛИЦИИ"

УДОСТОВЕРЕНИЕ

капитан милиции
Загидуллин
Фарваз Салманович

Приказом МВД по РБ

от "18" 03 2009 г. № 257

награжден нагрудным знаком

"ЛУЧШИЙ УЧАСТКОВЫЙ УПОЛНОМОЧЕННЫЙ МИЛИЦИИ"

Министр
генерал-майор
милиции

И.В. Алёшин



Министерство внутренних дел Российской Федерации

УДОСТОВЕРЕНИЕ

ст. лейтенант милиции
Загидуллин
Фарваз Салманович

приказом МВД РБ

от 11.06.2009 г. № 708

награжден нагрудным знаком

*"За отличие в борьбе с преступностью"*

Министр
генерал-майор
милиции

И.В. Алёшин



Наурыҙ ауыл биләмәһендә милиция участка инспекторы булып 13 йыл эшләгәс, бабайыма тағы бер бәхет йылмайҙы. РФ Эске Эштәр Министрлығының матди-техник базаһын нығытыу буйынса федераль программа сиктәрендә Башҡортостанға 153 өр-яңы ВАЗ 21214 («Нива») автомобиле ҡайтарылды. Учалы эске эштәр бүлегенә биш дана эләкте. Барыһы ла милицияның участка инспекторҙарына беркетелде, шул иҫәптән **өлкән лейтенант Фәрүәз Заһиҙуллин яңы “Нива”ға** “атланыу” бәхетенә ирешә. Был машинаһында көн дә Наурыҙ ауылы биләмәһенә ҡараған ауылдарға, Учалы ҡалаһына эшкә йөрөнө. Ауылының тәртибе өсөн көйҙө, тыныслыҡ һәм тынлыҡ булдырҙы.



Тәгәрмәс арты еңел булһын!

Фәрүәз Заһиҙуллинды хәрби-патриотик айлығы ваҡытында тыуған мәктәбе уҡыусылар менән осрашыуға саҡырып торҙо. Ул Тыуған алдында үтәгән бурыстары тураһында һәр ваҡыт ғорурланып һөйләне.




02/17/2010 01:33 PM

1992 йылда Фәрүәз Заһиҙуллиндың класташы Зилдә Әхмәҙиә ҡыҙы Мәүлитова уның тураһында мәҡәлә баҫып сығарҙы. Был да, бәлки, уның артабанғы тормошонда этәргес көс булып торғандыр.



## Класташым хаҡында

Мин был мәҡәләмдә Маҫкәү ауылы егете, класташым Фәрүәз Заһиҙуллин хаҡында һөйләмәксемен. Ни өсөн тиерҙәр, бәлки. Сөнки, ул хәрби хеҙмәтен Афған ерҙәрендә, ут эсендә үткәргән меңәрләгән егеттәребеҙҙең береһе.

Фәрүәз уҡыған сағында уҡ тракторист, йә шофер һөнәренә эйә булырға хыялланды. Һәм ул һөнәрҙәрҙе үҙләштерҙе лә. Ә 1985 йылда Совет Армияһы сафына алына. Үзбәкстанда хәрби хеҙмәт алымдарын дүрт ай буйына үҙләштергәндән һуң Афғанстандың Ҡабул ҡалаһына ебәрелә. Фәрүәз Салманович, башҡорт егеттәренә хас булғанса, хәрби бурысын намыҫ менән үтәй. Тәүҙә сержант, элемтәсе, һуңынан Р-409 радиореле станцияһы начальнигы бурысы йөкмәтелә уға. Ғүмер ептәре өҙөлгән мәлдәрҙе лә күп күрергә тура килә был егеткә. Көтөлмәгән хәл Фәрүәз хеҙмәт иткән частыла урап үтмәй — бер төндә дошмандар баҫып инә. Ул ҡаты яралана һәм Тыуған илгә оҙатыла. 1986 йылдың октябрь айында Төркмәнстанға, Ашхабад ҡалаһына ебәрелә. Фәрүәз өҫтөндә был юлы Афғанстанға китәсәк һалдаттарҙы һуғышҡа әҙерләү эше ята.

Ҡатмарлы ла, ҡурҡыныс та булғандыр класташымдың хеҙмәт юлы. Ләкин, иҫәләр, барыһы хаҡында ла сиселәп, ентекле итеп һөйләп бармайҙар шул беҙҙең егеттәр. Баҫалҡылыҡмы ул, әллә... бәлки, шулай кәрәктер — Фәрүәз Заһиҙуллин әлекке СССР Юғарғы Советы Президиумының Хөрмәт грамоталары, «СССР Ҡораллы Көстәренә — 70 йыл», «Яугир-интернационалистҡа мәрхәмәтле Афған халҡынан» миҙалдары менән награҙлана.

Әле Ф. Заһиҙуллин тыуған колхозында тыныс хеҙмәт юлы үтә. Үҙенә ҡушылған эште еренә еткереп, намыҫлы башҡара ул. Шофер булып эшләүсе Фәрүәзде ауылдаштары гел маҡтап телгә ала. Совхоз биргән өйҙә матур ғаилә ҡороп, теремек малай үҫтерә Фәрүәз. Эшендә иң-һәм, ғаиләндә татыулыҡ юлдаш булһын һиңә, класташым!

Зилдә МӘҮЛИТОВА,
уҡытыусы.

март 1992 йыл





2013 йылдың ноябрь айынан Фәрүәз Сәлмән улы Заһиҙуллин, **полиция майоры** исемен алып, **хаҡлы ялға китә.**





Афғанстандан Совет ғәскәрен сығарыуға 25 йыл тулыуға арнап башҡорт һәм урыҫ телендә «Учалинцы - в Афганистане. Время выбрало нас…» китабы сыға.






**Загидуллин Фарваз Салманович**

Я, Загидуллин Фарваз Салманович, родился 15 мая 1967 года в д.Москово Учалинского района, в многодетной семье. В 1974 году пошел учиться в первый класс, окончил 8-летнюю школу в д.Москово. В старших классах учился в Наурузовской средней школе. После окончания школы, в 1984 году, поступил учиться в СПТУ-98 п.Уральск на курсы тракториста-машиниста. Весной 1985 года был призван в армию. Учебные курсы проходил в Узбекистане, в г.Самарканд. После окончания учебных курсов, в октябре 1985 года, нас направили выполнять интернациональный долг в Афганистан. В 1987 году был уволен в запас в звании старшего сержанта. Награжден медалью «От благодарного афганского народа», грамотой Президиума Верховного Совета СССР, знаками «70 лет Вооруженных Сил СССР» и «Отличник Советской Армии» и т.д.

После увольнения в запас поступил учиться на курсы водителей г.Верхнеуральск Челябинской области. В 1988 году, окончив курсы, устроился водителем в Верхнеуральское АТП. В 1989 году вернулся в родной совхоз «Байрамгуловский», работал трактористом-машинистом. В 1991 году был переведен в автогараж в п.Уральск в качестве водителя. В 1994 году пошел работать в отдел вневедомственной охраны при Учалинском ГРОВД. В 2000 году был переведен участковым уполномоченным милиции ГРОВД и назначен участковым в Наурузовский сельский совет. Осенью 2001 года в должности участкового был направлен на три месяца в командировку в Чеченскую Республику. С ноября месяца 2013 года по выслуге лет в звании майора полиции ушел на заслуженный отдых. Женат. Имею троих детей – двух сыновей и дочь.

# Тыуған ил һаҡлаусыһының ғаиләһе





Заһиҙуллин Фәрүәз Сәлмән улы яҡшы ғаилә башлығы ине. **Ҡатыны Гөлнур Мулләхмәт ҡыҙы** менән өс балаға ғүмер бирәләр. Гөлнур Мулләхмәт ҡыҙы оҙаҡ йылдар ауылында һатыусы булып хеҙмәт итә. Аталары кеүек физик яҡтан сыҙамлы, уҡа-һыуға кисергә әҙер торған ике улы ла әрме һурпаһын татыйҙар. Икеһе лә хәҙер ғаиләлеләр.

Фәрүәз Сәлмән улының

**ҡыҙы Илвина**

Магнит ҡалаһында уҡый,

ул медицина өлкәһен һайлаған









# Оло улы Илмир Межозерный ҡасабаһында шахтер булып эшләй







Кесе улы **Илдар Фәрүәз улы**, аҫыл егеттәребеҙҙең береһе, полицияға эшкә бара - атаһының юлын һайлай. Армияла сыныҒыу алған, бер нимәнән дә ҡурҡмаған егетте патруль-пост хеҙмәтенә беркетәләр
















Әммә ғаилә башлығына киләсәктә лә балаларының ҡаҙаныштарын күреп йәшәргә Хоҙай насип итмәй, уйламаған ерҙә яҡындарын тәрән ҡайғыға һалып, **Фәрүәз Сәлмән улы 2017 йылдың 13 апрелендә мәрхүм була.** 50 йәшен туйларға бер айға яҡын ғына ваҡыт ҡала, яҡты донъя менән йөрәк сиренән бик иртә хушлаша.

# Фәрүәз Сәлмән улының йорто





# Йомғаҡлау

Шулай итеп, **Фәрүәз Сәлмән улы Заһиҙуллин** 50 йыл ғүмере эсендә генә **«Ватанға хеҙмәт итеү»** мәктәбен үтте. Ул үҙе һайлаған яҙмыш менән ҡәнәғәтләнеп йәшәне, сөнки ундай тормош мәктәбе күптәргә эләкмәй. Ул Тыуған иленә 25 йыл хеҙмәт итте. Ә был йылдар күҙ асып йомғансы ғына үтеп тә китте.

**Ҙур рәхмәт, һиңә, Фәрүәз Сәлмән улы!**

Тыныс йоҡла, Фәрүәз Сәлмән улы, беҙ һине бер ҡасан да онотмаçбыҙ, һин - **ысын Ир аçылы!**

# Кулланылған әҙәбиәт

- «Учалинцы в Афганистане» Время выбрало нас…» А.Сафина, Б. Кагарманова. г.Уфа, 2014.
- Гәзиттән алынған мәҡәләләр.
- Ғаилә архивынан материалдар




Класташым хаҡында





Тәгәрмәс арты енел булһын!